**Ғилем һәм ғәмәл**

# ЙӘН ДАУАҺЫ

***Хәүеф-борсоуҙарҙан ҡасып китеп булмай, улар күп осракта - беҙҙең үҙебеҙ, беҙҙең йәшәү, уй-фекерләүебеҙҙең рәүеше. Йән дауаһын үҙеңдең эске донъяңдан эҙләргә кәрәктер, бәлки? Хәҙистәрҙең береһендә юкҡа ғына иң бәхетле кешене башкаларҙан ғибрәт алыусы менән тиңләштермәйҙәрҙер. Һығымталар яһау, анализлау әҙәм балаһын башка мәхлүктәрҙән айыра ла инде. Иң ауыр мәлдәрендә әҙәм балаһы, ғәҙәттә, Аллаһы Тәғәләне исенә төшерә. Эйе, диндә бөтөн һорауҙарға ла яуап бар. Ҡулға Ҡөрьән алған кеше проблема тип уйлағанын кайсаҡ ваҡытлы бер һынау ғына икәнен аңлай башлай. Аңлау - үҙе үк хәрәкәт итергә, яңы аҙымдар яһарға ярҙам итә. Бөгөн дә дин әһелдәренең вәғәздәре, сығыштары меңәр һорауға яуап табырға булыша. Әлбиттә, хәкикәтте эрләгәндәр өсөн. Уйлана һәм һығымталар яһай белгәндәр өсөн. Уй һәм фекер аша ғына әҙәм тормошон йәмләй, үҙенең донъяһын мәғәнәлерәк итә ала. Мөхәммәдрәсүл хажиҙың сығышы был йәһәттән бик фәһемле, шуға ла уны һеҙҙең иғтибарға тәкдим итмәксебеҙ. Шифа һәм сихәт эҙләп меңәр сақрым юл үтеү, болоттарға олғашкан тауҙар артылыу, ҡарурмандар кисеү мотлаҡ түгел. Тормош асылы үҙебеҙҙә йәшеренгән. Күңел аһәңлеге шуның нигеҙен тәшкил итә.***

Ысынбарлыҡка иғтибар итһәк, вайымһыҙлыктан азат булып, уйланып, фекер йөрөтөп йәшәһен өсөн, Аллаһы Тәғәлә беҙгә һәр сак Ҡөрьән-Кәримгә мөрәжәғәт итергә ҡуша. Уйланыу Исламда ҙур роль уйнағанға күрә, фани тормоштоң мәғәнәһе тураһында уйлау һәм уның асылын тәрәнерәк аңларға тырышыу - мөһим бурыстарҙың береһе. Быға миҫалдар Ҡөрьәндә бик күп. Мәсәлән (мәғәнәһе): "Шул хаҡ, ғаләмдәрҙең һәм ерҙең яралтылыуында, көндөң һәм төндөң алмашыныуында уйлана белгәндәр өсөн аят бар". Күпме ғүмер кисеп һәм үҙебеҙ ураткан донъяны күрә тороп, уның тураһында уйланмайбыҙ һәм һығымталар яһамайбыҙ икән - был аҡылһыҙлыҡ һәм ғәфү ителмәслек хәл. Кеше уй ярҙамында үҙе менән бәйле күп нәмәләргә һығымта яһай ала, шул рәүешле күп хаталарҙан арынасаҡ һәм ауырлыктарҙы хәл итеү юлын тиҙерәк табасаҡ.

Көн менән төндөң алмашыныуы, кеше организмы һәм унда барған процестарҙың аһәңлеге тураһында ғына уйланған хәлдә лә әҙәм балаһы Аллаһы Тәғәләнең хикмәтен күрә ала һәм бөтөн яҡшылыктары өсөн Уға рәхмәтле буласаҡ. Бер ҙә юкҡа ғына: "Кеше ауырыу сағында сәләмәтлектең баһаһын, мәшәкәттән арына алмағанда буш ваҡытының, картайғас, йәшлектең кәҙерен нығырак аңлай башлай , тип әйтмәйҙәр бит. Аллаһы Тәғәләнең бер иманлы әҙәме: "Йәшлегеи менән һөйләшер өсөн, күҙ асып йоморлоҡ бер миҙгел бирелһә икәнсе", тигән. Йәшлем менән нимә тураһында һөйләшергә йыйынаһың, тип һорағастары: "Уға ҡартлыктың минең менән нимә эшләгәнен һөйләр инем", тип яуап бирә.

Ибн Аббас (р.ғ.) шулай тигән: "Кешеләр Аллаһы Тәғәлә тураһында уйға калып ултырғандар, шул сак Аллаһы Тәғәләнең Рәсүле (с.ғ.с.) уларға: "Аллаһы Тәғәлә тураһында уйланмағыҙ, ә Уның тарафынан яратылған мәхлүктәре тураһында уйланығыҙ, сөнки һеҙ Уның тураһында нисек тейеш, шул дәрәжәлә уйлап еткерә алмаясаҡһығыҙ", тип әйтә.

Йәнә лә бер хәҙис, бер мәл Рәсүл (с.ғ.с.) кешеләр уйға талған мәлдә улар янына сыға ла: "Ни өсөн тын ҡалдығыҙ?" тип һорай. Тегеләр: "Беҙ Аллаһы Тәғәләнең яратылмыштары тураһында уйлайбыҙ", тип яуап бирәләр. Рәсүл (с.ғ.с.) "Шулай итегеҙ", ти.

Аллаһы Тәғәлә тураһында түгел, ә уның тарафынан яратылған заттар тураһында уйлағыҙ, сөнки ул бөтәбарлыкты аңлауға алып киләсәк. Рәсүлдең (с.ғ.с.) якын дуҫтарының береһе Ата (р.ғ.) шуны һөйләгән: бер мәл ул Убайд ибн Умайр (р.ғ.) менән икәүләшеп хаҡ мосолмандарҙың әсәһе Ғәйшә (р.ғ.) янына киләләр. Улар ҡоролған корма аша һөйләшәләр. Хаҡ мосолмандарҙың әсәһе: "Эй, Убайд, йышырак килеп минең хәлде белешер өсөн һиңә нимә камасаулай?" тип һорай. Убайд: "Аллаһ Рәсүленең (с.ғ.с.): "Кешегә ни тиклем һирәгерәк барһаң, уға булған һөйөүең дә шул тиклем



ҙурыраҡ була", тигән һүҙе", тип яуап бирә. Унан һуң Умайр: "Рәсүлдә (с.ғ.с.) булған иң һокланғыс нәмәне һөйлә әле", тип үтенә. Ғәйшә илап ебәрә: "Һеҙ күреп- белгән сифаттары ла һәм бөтә ғәмәлдәре лә һокланғыс ине". Бер мәл Рәсүл (с.ғ.с.) ҡатыны янына килә, улар бер-береһенә һыйыналар. Шул сакта Рәсүл (с.ғ.с.) унан рөхсәт һорап: "Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыр өсөн мине ҡалдырып тор", ти. Бынан һуң ул таҙа һыу һалынған һауытты ала, тәһәрәтләнә. Намаҙ укығанда сағында шул тиклем илай, хатта һакалы һыулана. Сәждә ҡыла, был урын да еүешләнә, шунан ул бер як ҡабырғаһына ята ла йоғоға тала. Якын дуҫтарының береһе Билал (р.ғ.) иртәнге аҙанды укып, уятырға килгән сағында һорай кала: "Эй, Аллаһтың Рәсүле, нимә өсөн күҙ йәше түктең, һиңә бит Аллаһы Тәғәлә бөтәһен дә ярлыҡаны?" Рәсүл (с.ғ.с.) шулай ти: "Эй, Билал, Аллаһы Тәғәләнең: "Шул хаҡ, ғаләмдәрҙең һәм ерҙең, көн менән төндөң алмашыныуында уйлағандар өсөн аят бар", тип әйткәненән һуң, нисек иламаҫка мөмкин?" Һуңынан шулай тип өҫтәп ҡуя: "Ошо аяттарҙы укып та уйланмағандарға- ҡайғы".

Аллаһы Тәғәлә Әҙәм ғәләйһиссәләмде (ғ.с.) яралтканда ике юлдың береһен һайларға бойора: аҡыл һәм иман. Әҙәм (ғ.с.) аҡылды һайлай, сөнки иман менән аҡыл бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән, бер-береһен тулыландыралар. Аҡыл ярҙамында кеше иманын камиллаштырып аға табан бара ала. Аллаһы Тәғәлә тарафынан бүләк ителгән аҡылдың үҙ тәғәйенләнеше бар. Аллаһы Тәғәлә кешене үҙенә ғибәҙәтлек (ҡоллоҡ) итһен өсөн генә яралткан, ә аҡыл уға ғәмәл итеүендә ярҙамлашырға тейеш.

Әгәр ҙә кеше аҡылды ҡушылғанса ҡулланмай икән, Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт итеүендә ниндәйҙер йөк артмаҡлаған, үҙенең асылын да, нимә эшләгәнен дә аңламаған ишәккә генә тиң. Күпселек ғалимдар асылды, юғары халәтте аңлар өсөн суфыйсылыҡ (тасауүф) юлына килергә, был өлкәлә ҙур ҡаҙанышка өлгәшкән затты тыңларға кәрәк, сөнки тап шунда ғына таҙарыныу юлы һәм шул рәүешле йөрәкте Аллаһы Тәғәләне өйрәнеү нуры менән яктыртырға мөмкин тигән фекерҙә. Ғали заттарҙың береһе Хасан аль-Басри: "Тотош төндө уяу үткәргәнгә ҡарағанда бер сәғәт уйланыу хәйерлерәк", тигән. Танылған ғалим һәм суфый Фузаил ибн Ияд кешенең уй-фекерен көҙгә менән сағыштырған. Уй һинең эсеңдәге бөтөн яҡшылыкты ла, насарлыкты ла сағылдыра. Суфьян ибн Уяйна йыш кына шулай тиер булған: "Уйланған кеше бөтә нәмәнән дә үҙенә һабаҡ ала". Уйлана белеүсе харамды тап иткәндә лә үҙе өсөн һабаҡ, ғибрәт таба. Мәсәлән, телевизор тапшырыуҙарында харамды күргән ике кешелә ике төрлө мөнәсәбәт сағылыуы ихтимал. Уйлана белгән кеше ғаиләһен ҡурсып, боҙоҡлокто пропагандалаған тапшырыуҙы ҡарамай, телевизорҙы мотлаҡ һүндерәсәк.

Бер мәл бәҙуин Аллаһы Тәғәләнең Рәсүленә (с.ғ.с.) килә лә шулай ти: "Эй, Аллаһы Тәғәләнең Рәсүле, минең зина ҡылғым килә", Быны ишетеп, дин кәрҙәштәре уға ташланырға итә, ләкин Рәсүл (с.ғ.с.) уларҙы туктата: "Эй, кеше! Берәйһенең һинең әсәйең менән үҙең әйткәнсә ҡыланыуын теләр инеңме?" Тегеһе: "Юк", тип яуап бирә. "Һәм бына был кешеләр ҙә шулай булыуын теләмәй", тип Рәсүл имандаштарына күрһәтә. Теге әҙәмдән: "Ҡатының, йәки ҡыҙың менән шулай насар мөғәмәлә итһәләр, үҙең нишләр инең?" тип һорай. Һәм, әлбиттә, теге кеше әшәке ғәмәл тураһында уҙ яуабын бирә.

Бер ҡатын ғалим кешене харам ғәмәлгә өндәй, теге кеше яуап бирә: "Миңә гонаһ ҡылырға ярамай, сөнки мин ғалим, нимә генә эшләһәм дә кешеләр минән өлгө аласаҡ".

Апостолдары Ғайса пәйғәмбәрҙән (ғ.с.) "ерҙә һиңә оҡшаған берәйһе бармы?" тип һорайҙар. "Эйе, - тип яуап бирә пәйғәмбәр, - Ул - телмәре Аллаһы Тәғәләгә ҙикр әйтеүҙән, өндәшмәүе - уйланыуҙан, ҡарашы - нимәнән булһа ла һабаҡ алыуҙан ғибарәт кеше".

Хәсән (р.ғ.) шулай тигән: "Телмәрендә хикмәт булмаған кеше - буш һүҙ һөйләүсе, кеше өндәшмәгән сағында уйланмай икән, был онотоуға, хәтерҙе юғалтыуға бәрәбәр". Бөтә ғәмәлдәрен Аллаһы Тәғәлә күреп тороуын иҫтә тотоусылар - 60 йыл ғибәҙәт итеүселәргә тиң. Ҡөрьәндә шундай юлдар бар (якынса мәғәнәһе): "Ер өҫтөнән ғорур (тәкәббер) йөрөгәндәрҙән аяттарымды алыҫ тотормон" (Аль-Ағраф; 146)

Ислам тарихында фекерләү ярҙамында хәкикәткә килгәндәр бик күп. Һәүбән (р.ғ.) Рәсүлде (с.ғ.с.) шул тиклем нык хөрмәт итә, уны оҙак күрмәй тороуҙы нык ауыр кабул итә. Бер мәл Рәсүл (с.ғ.с.) бер алышта тоткарлана, кайткас, Һәүбәндең ябыҡып киткәнен күрә. Рәсүл һорай: "Эй, Һәүбән, ауырымайһыңмы, нимә һине хафаға һала?" Һәүбән яуаплай: "Юҡ, Аллаһы Тәғәләнең Рәсүле, ауырымайым. Хөкөм көнөндә тамуҡка эләкһәм, мин һинең менән инде күрешә алмаясаҡмын, быны уйлап хәлем бөттө. Әгәр ҙә Аллаһы Тәғәлә үҙенең рәхмәте менән мине Йәннәткә индерһә, һин Йәннәттең - юғары, ә мин түбәнге дәрәжәһендә буласаҡмын. Шуны уйлау мине ошо хәлгә тарытты". Был кешене киләсәктә урыны ҡайҙа булыуы түгел, ә Рәсүл (с.ғ.с.) менән күрешә алыу-алмауы нығырак борсой. Был хәл түбәндәге аяттың индерелеүенә сәбәп була, һәм был аят - бөтөн мосолмандарҙың шатлығы: "Аллаһы Тәғәләгә һәм Уның Рәсүленә буйһонғандар Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәт иткән рәсүлдәр, салихтар һәм шаһиттар иҫәбендә буласаҡ".

Был - насар ғәмәлдәр яһаған хәлдә лә, хаҡ мосолмандарға булған һөйөүебеҙ беҙҙе ҡотҡарыр тигән өмөт уята.

Аллағы Тәғәләгә тоғро ҡолдарҙың береһе, үҙенең хикмәтле китаптары менән танылған Фузайл ибн Ияз тормош юлының башында юлбаҫар була. Йәш сағында урлашыр өсөн стена буйлап үрмәләгәндә бер тәҙрә аша Ҡөрьән укыған тауышты ишетә. Түбәндәге аят укыла (мәғәнәһе): "Йөрәктәре менән иман килтергәндәргә Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыр вакыттары етте түгелме". Был аятҡа әһәмиәт тә бирмәскә, колак та һалмаҫка мөмкин ине. Ләкин ул тукталып кала, уйланып тора, шунан күңелен үкенес биләй, менгән еренән кире төшә. Был төндө ауыл осонда каруан туктала, кешеләр үҙ-ара бәхәсләшә башлай, берәүҙәр юлды дауам итергә, икенселәре таң атканын ошонда көтөргә өндәй, юғиһә, Фузайл юлды баҫаҡ, тиҙәр. Был һүҙҙәрҙе ишеткән Фузайл каруансылар янына сыға: "Юлығыҙҙы дауам итегеҙ, шул хаҡ, Фузайл һеҙҙең берегеҙгә лә яуызлыҡ ҡылмаясаҡ", ти.

Фекер кешенең тормошо нисек ҡырҡа үҙгәртә алырына йәнә лә бер сағыу миҫал. Абдулкадир Гейлани (кәҙриә тәрикәте имамы) әсәһенә бер ҡасан да алдашмаҫка тип һүҙ бирә. Юлда бер мәл уларҙың каруанына юлбаҫарҙар һөжүм итә. Бөтөн ҡыйбатлы нәмәләрен тартып ала башлайҙар. Һәр каруансы үҙендә ҡыйбатлы бер нәмә лә булмауына ышандырырға тырыша. Араларында иң йәше Абдулкадир була, унан да юлбаҫарҙар нимәһе барлығын һорай, малай үҙендә 67 алтын акса барлығын әйтә. Аҡылдан яҙғанға һанап, уны янына бүтән килмәйҙәр, шулай ҙа был турала башлыктарына һөйләйҙәр, баш юлбаҫар малайҙы килтерергә ҡуша, унан: "Аксаң бармы?" тип һорай. "Эйе, алтмыш ете алтын". Байлыгын ни өсөн йәшермәүен һорағас, Абдулкадир әсәһенә бер ҡасан да алдашмаҫка вәғәҙә биргәнен әйтә. Юлбаҫарҙарҙың башлығы шулай ти: "һин әсәйеңә биргән һүҙеңде тоттоң, ә мин Аллаһы Тәғәләгә ант биргәйнем, ләкин уны үтәй алманым". Ул түбәгә килә һәм тартып алған бөтә нәмәләрен кире хужаларына ҡайтарып бирә.

Мөхәммәд пәйғәмбәр (с.ғ.с.) сөннәтендәгеләрҙең һәм изге, салих бабаларыбыҙ тормошонан быға оҡшаш миҫалдарҙы (тәүбәгә килеп, тура юлға баҫыусылар) күп килтерергә мөмкин.